

“Милли мираҫҡа тоғролок”,

# “Табын күрке - бауырһаҡ”

*Архангел районы Ҡыҫынды ауылында бауырһаҡ байрамы өсөнсө тапҡыр уҙғарылды.*

*Бауырһаҡ! Башҡорт халҡы уны элек-электән туй, оло табындар өсөн әҙерләр булған. Архангел районы Ҡыҫынды ауылында бауырһаҡ байрамы өсөнсө тапҡыр ойошторолдо. Унда ҡатнашҡандарҙың һәр ҡайһыһы был ризыҡты бешереүҙең бихисап серенә төшөнгән дә инде.*

*Төбәктә йәшәүсе халыҡтарҙың мәҙәниәт өлгөләренә һаҡсыл ҡараш, башҡорт милли аш-һыу йолаларын һаҡлау һәм тергеҙеү, йәш быуынды халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәренә ылыҡтырыу, милләт – ара татыулыҡты нығытыу сараның төп маҡсаттарының береһе.*

*Төрлө ауылдарҙан килгән ҡәйнәләр, килендәр, еңгәләр, үҫмер ҡыҙҙар, уңған хужабикәләр тәмле май еҫтәрен таратып милли ризыҡтар – бауырһаҡ, ҡоймаҡ, ҡош теле, ураманы үҙ рецебына таянып бешереп килтерә. Әсе, сөсө ҡамырҙан, сәк-сәк формаһындағы биҙәкләп бешерелгән бауырһаҡтарҙы тап ошо байрамда ғына ауыҙ итеп була. Аш-һыуға, милли мираҫҡа ихтирам уятҡан, милли рухты үҫтергән матур сара аша башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының уңғанлығы асыла.*

*Раушан Хазиәхмәтов, Ҡыҫынды ауыл Мәҙәниәт йорто художество етәксеһе.*


















***Баллы-майлы Сәксәккәй,***
***Мин бигерәк тәмлекәй,***
***Бөтәһенә лә эләкмәй –***
***Һиңә генә кәрәккәй!?...***





# Халыҡ байрамы “Табын күрке – бауырһаҡ”























*Ауылыбыҙ – Ҡыҫынды,*
*Билен быуып йыйынды,*
*Күтәрергә ауылды,*
*Эй йырланы йырымды –*
*Бауырһаҡлы, сәксәкле,*
*Урамалы, ҡош телле –*
*Бай, тип туған яғымды!*
*Бай, тип тыуған яғымды!*















***Бауырһаҡ – ул мул табындың, бай тормоштоң ризығы. Бауыр-бауыр-бауырым, тип, елеп йөрөп әҙерләгән, һәр бөртөгөн ҡәҙерләгән, өҫтәлдәрҙе һығылдырған аш-һыуҙарҙың ҡыҙығы.***





***Төрки телле халыҡтарҙың милли ризыҡтары бик күп. Шуларҙың затлыһы, моғайын, бауырһаҡтыр. Уны иң дәрәжәле ҡунаҡтарға тәкдим итһәк тә бик урынлы, бүләк итеп тапшырыу ҙа матур. Әммә уларҙы һәр кем дә оҫта бешерә, затлы итеп биҙәй белмәй шул.***

***Арабыҙҙа ундайҙар бармаҡ менән һанарлыҡ ҡына. Шуға ла бауырһаҡ, сәксәк, йыуаса, ҡош теле, урама бешереүселәрҙе ололау маҡсатында “Табын күрке – бауырһаҡ” байрамы ойоштороу бик тә якшы күренеш. Милли мираҫҡа тоғролоҡ билдәһе.***

# Байрам сараларынан фотоһүрәттәр




29.10.2016




30.10.2015

30.10.2015



*Бауырһаҡты кем белмәй, кем ашамай, кем күрмәй?! Йә, кем белмәй?!! Барыбыҙ ҙа беләбеҙ, хатта яҡын күрәбеҙ. Бауыр-бауыр-бауырһаҡ тип, талымһаҡ та ҡабымһаҡ тип, танһыҡ аш тип һөйәбеҙ, табын түрен йәмләп торған тәмле аш, тип беләбеҙ.*



***- Башҡорт халҡының уңғанлығына һоҡланмау мөмкин түгел: йәше лә, ҡарты ла әүеҙем йыйыла, күмәкләшеп уйнап, йырлап-бейеп, сәй эсеү өсөн тәмлекәстәр әҙерләп килтерә. Байрам ашһыуға ихтирам уятҡан, милли аңыбыҙҙы үҫтерәгән матур сараға әйләнде. Ҡайҙа ғына йәшәһәк тә, ниндәй тарафтарҙа йөрөһәк тә, тыуған илебеҙҙе хөрмәт итергә, уны яратырға тейешбеҙ. Һәр бала үҙ милләте йолаларында үҫһә, киләсәгебеҙ ҙә имен буласаҡ.***




Бауырһаҡ байрамына рәхим
итегеҙ!